18 111

Кыҙыбыҙға ес йәш!..

Эй, был ғүмер! Аккан һыуҙай, иҫкән елдәй, үтә лә китә икән. Күҙ асып күҙ йомғансы!..

Әле генә бит "Башкортостан кыҙы" - күңелдәге бөләңгерт кенә бер хыял ине. Әле генә, илебеҙҙең иллеһенә аяк баҫканда, кыҙыбыҙҙың мөлдөрәмә тулы өмөт күнәктәрен аҫкан йәйғор көйәнтәһен күреп: "һөйөнсө!" тип һөрәнләгәйнек. Һәм бына әле генә уҙ журналыбыҙҙың тәүге һанын калай итеп донъяға күрһәтергә тип, баш ватып, болокһоп, дәртләнеп-канатланып йөрөй инек.

Бөтәһе лә кисә генә булған кеүек.

Ә, бакһаң, кыҙыбыҙҙың һыу юлы башлауына ес йыл да үтеп киткән икән. Эйе, "Башкортостан кыҙы"на ес йәш бөгөн.

Өс йыл ғүмер...

Тарих өсөн был бер ни ҙә түгел. Сал Тарих-олатай ғүмере тиҫтә-тиҫтә мөсәлдәр, быуаттар, осорҙар менән үлсәнә. Кеше ғүмере өсөн дә әллә ни түгел был: сабыйҙың сак теле асылып, тәтелдәп һөйләшә башлаған сағы ғына...

Әммә илебеҙ тормошо ғаләм тиҙлеге менән үҙгәргән осорҙа, әҙәм балаһының, "айға менеп, түбән карап", Ер-Әсәбеҙгә бағып торған заманда, әкиәттәге Зөһрә-кыҙ һукмактарынан иҫ китмәле ысын "ай арбаһы" йөрөп яткан бер мәлдә, был ес йыл ғүмер журнал өсөн аҙ ҙа түгел.

Ошо ес йыл ғүмер эсендә "Башкортостан кыҙы" илебеҙҙең бөтә донъя күләмендәге илле йыллык каҙаныштарын билдәләп, йыл үсәһен ай үскән, ай үсәһен көн үскән тыуған республикабыҙҙың алтын туйын туйлап, уның тыуыуы хакындағы изге танытмаға үҙе кул куйған бөйөк Лениндең йөҙ йыллығын тантана итеп,

Коммунистәр партияһының XXIУ йыйынын каршылау көндәренә лә аяк баҫты.

Бер уйлаһаң, сал Тарих өсөн дә онотолмаҫ биттәр яҙып калдырған йылдар был. Фиҙәкәр хеҙмәт, тынғыһыҙ көрәш, оло еңеү йылдары улар. Шуларҙың бөтәһе лә яңы тыуған "Башкортостан кыҙы" журналының төп айышын, төп юнәлешен билдәләне. Шулай ук икегә бүленгән хәүефле донъя күләмендә барған йән тетрәткес хәл-вакиғаларға ла ғәмһеҙ-вайымһыҙ булып калманы ул, үҙ һүҙен әйтә килде.

Бөтәһенән элек, "Башкортостан кыҙы" үҙенә канатлы илһам, кыҙыклы уй-ниәттәр, оло ижади уңыштар теләгән өлкән әхирәттәре "Советская женщина", "Работница" һәм "Крестьянка" ~~һәм "Азат катын"~~ журналдарының, шулай ук буласак укыусыларының теләк-тәкдимдәрен иҫкә алып, уларға тоғро дуҫ та, ихлас ярҙамсы ла, якын серҙәш тә булырға тырышты.

Бөйөк Чехов әйткәнсә, "кеше бөтә яктан да: уй-фекере менән дә, күңеле менән дә, йөҙө-төҫө, хатта буй-һыны менән дә матур булырға тейеш". ● катын-кыҙ - бигерәк тә!

Ләкин кеше иң элек - эше менән матур. Әлбиттә, минән киткәнсе, әйәһенә еткәнсе, тип йөрөүе менән түгел, ә үҙ эшенең ысын мәғәнәһен тойоп, ихлас күңелдән бирелеп аткарған аңлы хеҙмәте менән күркәм кеше! "Әйҙә, шағир, мактау йырла һин" шундай катынға!"

Һәм үҙенең тәүге һанынан алып ~~864 биттән торған 36 һанында ла~~ "Башкортостан кыҙы" республикабыҙҙың "эштә ялкын кеүек" катын-кыҙҙарының ауыл хужалығындағы һәм промышленностәге хеҙмәт уңыштарын күрһәткән тиҫтә-тиҫтә очерк һәм зарисовкалар, уларҙың

мәҙәниәт, фән һәм сәнғәт елкәһендәге казаныштарын, куп яклы йәмәғәт эшмәкәрлеген, кенкурешен һәм ғаилә хәлен яктырткан йеҙәрләгән мәкәләләр, хаттар баҫтырып сығарҙы.

Беҙгә был тәңгәлдә: "Дан йырлау менән, гәзитсә материалдар менән утә мауыкмайһығыҙмы?"- тиеуселәр ҙә булды. Әлбиттә, бында етешһеҙлектәр ҙә, хаталар ҙа булғандыр, кайһы бер материалдар газетаға ла тартымырак булып ~~ҙа~~ киткәндәр. Ләкин асылда беҙ яңылышманык буғай. Журнал артабан да иң алдынғы хеҙмәт кешеһен данлаясак. Тик бында коро биография һейләп сығыуҙан ғына һак булырға һәм кешенең эске донъяһына нығырак утеп инергә кәрәк ине беҙгә.

Шулай ҙа ошо ес йылда 36 булекле 864 биттән торған 3 томлык йылъяҙмабыҙҙы яҙыу есен, уның һәр бер юлын, һуҙен, хәрефен энә куҙенән уткәреп, редакцияға килгән 3462 материалдың 2772-һен тикшереп, ҙөрөсләп, 1,695,010 данала баҫтырып сығарыу есен ғорурланмай ҙа булмай. Был йылъяҙманы бит беҙ 1032 авторыбыҙ менән бергә яҙҙык! Ес йыл эсендә шул саклы авторҙарыбыҙ барлыкка килеу һәм тәугe йылда ук - 42,523, икенсе йылда - 45,410, есенсе йылда - 50 меңдән ашыу, ә бөгөн килеп 60 меңгә якын укыусыбыҙҙы табыу ~~барлыкка~~ уҙе бер казаныш тугелме һуң?

Эйе, хәҙер етмештән ашыу терле-терле рубрикалары булған журналыбыҙҙың уҙ һуҙен, уҙ йеҙен, уҙ тесен табыуҙа, уның формалашыуында, уҙ авторҙарын һәм укыусыларын туплауҙа ошо уткән ес йыл хәл иткес йылдар булды. "Башкортостан кыҙы"ның уҙ укыу укыусыһы - туған халкы алдында ҙур һынау утеу, етди имтихан тотоу һәм ижади әҙләнеу йылдары ине был. Кыҙыбыҙ был имтиханды уңышлы утте һәм һынатманы буғай... Сөнки журналыбыҙ, куп

һанлы уҡыусыларының һорауы буйынса, өс йәше лә тулыр-тулмаҫтан, Бөтә Союз каталогына индерелде! Тимәк, уны Советтар Союзының теләгән бер мөйөшөндә сикләүһеҙ яҙҙыра аласаҡтар. Уны хәҙер бер Башҡортостанда ғына түгел, ә күрше өлкәләрҙәге туғандарыбыҙ ҙа, Урта Азия республикаларында йәшәүсе кәрҙәштәребеҙ ҙә иркен уҡый алалар.

"Башҡортостан ҡыҙы"ның уҡыусылары артҡан һайын, йөрөр юлдары ла киңәйгән һайын, уға талап та арта бара. Ҡатын-ҡыҙҙы бөгөн бик күп мәсьәләләр ҡыҙыҡһындыра. Шуға күрә журналдың төүгө һандарынан уҡ донъя ҡатын-ҡыҙҙарының тыныслыҡ һәм милли азатлыҡ өсөн көрәшенә лә, бөтә ил яңылыҡтарына ла, күрше өлкәләрҙәге туғандарыбыҙ тормошона ла, ҡыҙыҡлы тарих биттәренә лә, халҡыбыҙҙың бөтмәҫ-төкәнмәҫ бай ижад ҡомартҡыларына ла урын бирелә. Был артабан да дауам итәсәк, әлбиттә.

Ҡатын-ҡыҙҙың хеҙмәтенән, йәмәғәт эшмәкәрлегенән тыш, уның үҙенә генә хас тағын да бер ҙур миссияһы бар- был уның ғаилә тормошонда тотҡан урыны. Юҡҡа ғына беҙ: "Ҡатын-ҡыҙ - ғаилә тотҡаһы",- тимәйбеҙ бит. Ә ғаилә йәмғиәттең бер күҙәнәге икән, һәр күҙәнәктең саф, сәләмәт, теремек булыуы - йәмғиәттең дә сәләмәтлеге ул. Әлбиттә, тормош булғас, барыһы ла була. Ғүмер итеү - ялан үтеү түгел. Ҡайһы саҡта һауыт-һаба ла шылтырамай булмай. Ғаилә шулай сынығa, үҫә, тәжрибә туплай.

Ләкин ғаилә мөнәсәбәттәрендә әле иҫке ғәҙәттәр ҙә бөтөп етмәй. Халыҡ аңындағы боронғо ҡаршылыҡтар ир менән ҡатын мөнәсәбәтендә лә ныҡ тамырланған. Әйтәйек, борон бабайҙар:

"Ирҙе ир иткән дә - катын, ер иткән дә - катын",- тиһәләр, әбейҙәр ҙә аптырап тормаған: "Катынды йөҙөк кашы иткән дә - ир, мунса ташы иткән дә-ир",- тип куйғандар. Йәки кыҙ-кыркын: "Иргә таянма, Иҙелгә таян!"- тиһә, ир ат та яуапһыҙ калмаған: "катыныңа ышанма, атыңа ышан",- тиер булған. Шулай ук ир башкайҙарына берәй бәлә төшһә; "катыныңдан алда бүркең менән кәңәш ит",- тигәндәр. Ә былары: "Ир - баш, катын - муйын, теләгән якка бора ла куя",- тип кенә ебәргәндәр. Ир менән катын каршылығы шулай быуаттар буйы дауам иткән, шулай ҙа ир-катынһыҙ, катын ирһеҙ йәшәй алмағас, "икеһе бер шайтан" булып та карағандар. Сөнки иң ауыры - кеше булып калыу.

Хәҙер ҙә был мәсьәлә ал да гөл генә түгел әле. Шуға күрә лә өс йыл эсендә редакцияға килгән йөрт меңдән ашыу хаттың яртыһы тип әйтерлек ошо "эске эштәр" хакында.

Мөхәббәт!.. Кемде генә ситләтеп уҙған да, кемдәрҙе генә уттарға һалмаған! Шағир әйткәнсә:

"Мөхәббәт - ул, әйтерһең дә, утлы йәшен,
Һанап-һорап тормай һис бер кемдең йәшен,
Һүнмәҫ ялкын менән ялмай картын-йәшен;
Көйҙөрөр тип куркһаң әгәр, кас һин, йәшен,
Коя күрмә тик аҙактан күҙең йәшен!
Мөхәббәт - ул, әйтерһең дә, утлы йәшен"...

Шуның өсөн беҙ ике зат - егет менән кыҙ, ир менән катын араһында мөхәббәт һәм дуҫлык кына, ихтирам һәм татыулык кына йәшәһен өсөн, катын-кыҙ йөҙөк кашы һымак балкып кына торһон, ә ир-ат ер булып калмаһын, тип, укыусыларыбыҙҙың үҙ теләк-тәкдимдәре буйынса, "Һүҙ әхләк хакында, "Һөйөүеңде һаклай

бел", "Дан ғаиләләр" һәм "Әхирәттәр кәңәше" тигән бүлектәр асып, дуҫлык һәм мөхәббәт, ғаилә мөнәсәбәттәренә лә киң урын бирә башланык.

Ғөмүмән, был ~~"эске эштәр" буйынса~~ хакта үҙ-ара фекер алышыу, күңел һәм тормош тәжрибәһе менән уртаклашыу артабан тағы ла ихласырак дауам итер тигән өмөттә калабыҙ. Әйҙә, "әсәй-каҙна, атай - еҙнә" генә лә булып калмаһын. Шулай ук "әсә күңеле - балала" булған кеүек, бала күңеле лә далала ғына булмаһын ине. Атанан күргән ук юна, әсәнән күргән тун бесә, тигәндәй, якшы аталар ҙа күп, уларҙы ла онотмайык! Аталар һәм балалар мәсьәләһен дә уртаға һалып һөйләшәйек. Был тәңгәлдә беҙгә аталар ҙа ярҙамға килер тип ышанабыҙ. ~~Йөктө уртак күтәрешәйек!~~

Быларҙан тыш, беҙҙең шаян еңгәләр әйтмешләй, катын-кыҙҙың өй эсендәге мәшәкәттәре лә "тауык суплап бөтергеһеҙ!" Шуға күрә бала бағыу, сәләмәтлек һаклау, үҙ-үҙеңде карап йөрөтөү, өй биҙәү, уны йыһазландырыу, аш-һыу әҙерләү, кунак каршылау,төрлө байрам-туйҙар үткәреү, борондан килгән якшы йолалар, милли уйындар, ғөрөф-ғәҙәт, әҙәплелек кағиҙәләре, кейем-һалым тегеү, бәйләү-сигеү һәм башка шуныңише кул эштәре буйынса ла төрлө кәңәштәр биреп барыу - артабан да журналдың төп бурыстарынан булып каласак.

Әлбиттә, әҙәби әҫәрҙәр: повесть, хикәйәләр, шиғыр, поэмалар, үҙешмәкәр түңәрәктәр өсөн сәхнә әҫәрҙәре, яңы сыккан йыр-көйҙәр, төрлө сәнғәт яңылыктары, кыҙыклы фото һәм һүрәттәр, Кәләсбикә апай кәләмәстәре, төртмә һүҙҙәр, ололар һәм балалар һөйләшеүҙәре, халык ижадының аҫыл өлгөләре булған

боронғо йыр тарихтәре, әкиәт һәм хикәйәттәр, мәкәл һәм әйтемдәр – былар бөтәһе лә журналды биҙәп торор, һәм был тәңгәлдә лә беҙгә уҡыусыларыбыҙ әүәлгесә ихлас ярҙам итер тип ышанабыҙ.

Ышанабыҙ! – сөнки ошо өс йыл ғүмер эсендә генә "Башкортостан кыҙы"ның меңдән ашыу үҙ авторҙары – хәбәрсе-журналистәре, яҙыусы һәм шағирәләре барлыкка килде. Оло рухлы ил инәләре һәҙиә апай Дәүләтшина менән Зәйнәп апай Биишеваны тыуҙырған бәрәкәтле башкорт тупрағы Кәтибә Кинйәбулатова һәм Мәзинә Сакаева һәм Биби Нураева, Сания Мораҙтшина һәм Гүзәл Мирҙаева, Фәүзиә Рәхимғолова, Әсмә Меслимова һәм һәҙиә Рафикова, Рәкиә Һәсәнова һәм Дәҡнә Енгалычева, Сара Сафарова һәм Зәйнәп Сөләйманова, Рәғиҙә Янбулатова һәм Мөкәрәмә Садиковалар кеүек инде өлкән һәм урта быуын яҙыусы ~~һәм~~ ә журналистәренә алмашка әллә күпме таланттар бүләк итте. Улар араһында үҙҙәренең өмөтлө ҡәләмдәре менән уҡыусыларыбыҙ күңеленә йәйғор нуры өҫтәгән Әнисә Таһирова, Факиһа Нафикова, Миңлебикә Йәрмөхәмәтова, Мәрйәм Буракаева, Әлфинур Вахитова, Гөлфиә Юнысова, Таңһылыу Карамышева, Минзиә Шаһманова, Рәмзилә Хисаметдинова, Зилә Кусәрбаева, Суфия Якупова, Фирҙәүес Ғәлиева, Зөһрә Котлогилдина, Әлфиә Крымғужина һәм тағы әллә күпме йәштәрҙең килеүе – "Башкортостан кыҙы"ның ғорурлығы һәм киләсәге ул!

"Тыуған илкәйемә лә кайтыр инем,
Аяктарым талһа, имгәкләп",– тип йырлаған Ғилмияҙаны, үҙ исемдәрен йыр итеп калдырған Мәҙинәкәй, Сәлимәкәй, Зәлифәкәй, Шәүрәкәй кеүек йөҙәрләгән кыҙҙарҙы һәм "Таштуғай" менән "Ашкаҙар" кеүек ~~бөйөк~~ үлемһеҙ йырҙарҙы тыуҙырған ил инәләренең рухы мәңгелек ул!..

Яҙығыҙ, кыҙҙар, тартынмағыҙ, тартыныр замандар үткән, һеҙҙең сәсән телегеҙ менән уттар-һыуҙар кискән башкорт иле-

нең донъяға уҙ һүҙен әйтер көндәре еткән! Ҙәмышығыҙ инде үҙ ҡулығыҙҙа йылдарығыҙ мөғжизәле, юлдарығыҙ яҡты, йырҙарығыҙ иркле һеҙҙең!..

Өс йыл ғүмер...

Шул ғүмер эсендә шиғриәт иленә барыусы 4 меңгә яҡын авторына "Башҡортостан ҡыҙы" үҙенең 4 меңдән ашыу сәләм-хаттарын яҙған. 30 меңләп уҡыусыһы менән күҙмә-күҙ осрашып һөйләшеү өсөн 361 урында әҙәби кисәләр үткәргән. Өс йыл эсендә уның аяҡ баҫмаған ере лә ҡалмағандыр. Ҡалһа, бер биш-алты районда ғыналыр.

Ә журналда баҫылған материалдарҙы ойоштороу, килгән хәбәрҙәрҙе тикшереү, дөрөҫләү, фотоһүрәттәр төшөрөп алып ҡайтыу өсөн редакциялағы ун кеше тарафынан нисәмә .мең саҡрым юлдар үтелгән! Самолетта ла, поезда ла, машинала һәм мотоциклда ла, лерт-лерт юртҡан атта ла, тәпәй-тәпәй йәйәүләп тә... һабан турғайының йыры менән үрелгән ҡояш нуры аҫтында ла, шыбырҙап яуған ҡойма ямғырҙа ла, күҙ асҡыһыҙ бурандарҙа ла. Юл аҙабы һәр кемгә таныш: юлдарҙың ниндәйе генә булмай ҙа, уларҙың ҡайһы бере ниндәй генә түрәгә йәки өй хужаһына илтеп юлыҡтырмай!.. Ләкин юламан-журналист юлдан зарланмай. һукраныр булһаң, кешеләрҙе яратмаһаң, уларҙың яҙмыштары һиңә ят булһа, был тынғыһыҙ, ауыр, сәмле һөнәрҙән шунда уҡ ваз кис! Юлсының юлда булғаны яҡшы. Йөрөгән аяҡҡа ғына юрмә эләгер. Юлдар ғына, юлда осратҡан ҡыҙыҡлы кешеләр генә, икһеҙ-сикһеҙ тыуған ереҢ генә һинең күңелде асыр, илһамыңа ҡанат ҡуйыр, рухыңды байытыр.

Юлдар, юлдар, ауыр булһа булһын,
Тик һуңғыһы ғына булмаһын!..

Ҡыҙғаныска ҡаршы, һуңғылары ла булып ҡуя шул. Журналы-

быҙҙың тәүге техредакторы Люциә Әминева шулай арабыҙҙан бик иртә китте. Ауыр тупрағың еңел булһын, Люциә! Һинең йәшәлмәгән ғүмеренде каләмдәштәрең дауам итә.

Эйе, юлдарҙа шулай моңһоу хистәр ҙә кағылып үтә: бер кем дә мәңгелек түгел шул. Уның карауы һин сығарған журналды юл буйында машина көтөп торған йәки трамвайҙа барған берәй әшсе йәки укыусы кыҙ кулында күреү, йәки уны берәй ауыл китапханаһында укып ултырыуҙарын күреү йәки элекке сәй кағыҙҙары, ~~бөҙәй һүрәттәр~~ урынында "Башкортостан кыҙы"ның берәй һүрәтен күреү күңелгә ниндәй рәхәт!.. Ә һин яҙғанды укыған берәй укыусыңдан кош телендәй генә рәхмәт хаты килеү ни тора. Ул рәхмәт - һинең иң ҙур һөйөнөсөң!

Бына 70 йәшлек акһакалдың йәшел кара менән яҙған ун битлек хатынан өс һөйләмә генә: "Һинең һөйөклө һәм һөйкөмлө кыҙың бик күп ижади көсөңдө алалыр, билгеле. Ләкин "Башкортостан кыҙы" ҙур ғына түгел, ә бөйөк һәм ғәжәп мөһим эш ул! Шул гүзәл кыҙыңды үҫтереп еткерерлек алмаштар әҙерлә..." Хәстәрле оло быуындың беҙҙең быуынға аманат хаты был. Уны Тукай шәкерте, Такташ дуҫы Хәсән ағай Туфан яҙған!..

Өс йәшлек кенә "Башкортостан кыҙы"на заманыбыҙҙың оло шағире биргән был баһа беҙҙең өсөн ҙур кыуаныс, әлбиттә! Ғәлимъян Ибраһимов укыусыһын, Шәйехзада Бабич шәриктәшен "Башкортостан кыҙы" ла 70 йәшлек данлы ғүмере һәм картаймаҫ ижад еңеүе менән котлай!

Хаттар, хаттар...

Кайҙан ғына килмәй был хаттар: Алыҫ Көнсығыштан да, Урта Азиянан да, Донбастан да, күрше Силәбе, ырымбур, Куйбышев, Саратов, Пермь, Курган, Свердловск

өлкәләренән дә, бөйөк төҙөлөштәрҙән дә, ил сиктәренән дә. Ә инде уҙебеҙҙең ауыл һәм калаларҙан яуған хаттар тураһында әйтеп торағы ла юк!..

Һәм кемдәрҙән генә килмәй ул хаттар! Уларҙың уңдан һулға серле ғәрәп хәрефтәренән сәйлән кеүек теҙелгәндәре лә, сөйәлләнеп каткан кулға кәләм алып, латин хәрефтәре менән сыймаклanғандары ла, бөгөнгөсә бала-саға кулы менән нағышланғандары ла бар. IY-Y класс укыусылары ла, йөҙ йәшәр әбей-бабайҙар ҙа яҙа уларҙы. Инженер-нефтсе лә, эшсе-колхозсы ла, укытыусы-врач та, бешексе-хужабикә менән пограничник-һалдат та! Ул хаттарҙа ауыр һәм данлы үткәндәр ҙә, катмарлы һәм тынғыһыҙ бөгөнгө лә, тыуып килгән мауыктырғыс киләсәк тә күренә.

Кыҙҙар битенә сыккан һипкелдәрҙән алып дәүләт әһәмиәтендәге проблемаларға тиклем төрлө мәсьәләләр күтәрелә уларҙа. Кайһыларынан һының катып көләрлөк, ә кайһы берҙәренән ултырып иларҙай булаһың. Улар аһналар, айҙар буйы тынғы бирмәй. Сенки уларҙа кеше яҙмыштары! Ә яҙмыштар төрлөсә: бар еңеле, бар фажиғәлеһе. Уларҙы һине ашығыс юлға сакыра...

Кыҫкаһы, был хаттарҙа - беҙҙең бөтә тормошобоҙ. Шуға ла беҙ уларҙы. ҙур бер хазина асҡандай, асып укыйбыҙ. Был хазина - беҙҙең төп материалыбыҙ. Журнал редакцияһы шул хазинаға таянып эш итә лә инде. Уларҙа бөтәһе лә бар: үтенес тә, һорау ҙа, талап та, акыллы кәңәш тә, эшлекле тәкдим дә, кыҙыклы темалар ҙа һәм күтәрәһе мәсьәләләр ҙә...

Ниндәй һиҙгер, киң күңелле, тәрән акыллы халкыбыҙ беҙҙең! Тукай әйтмешләй, ысынлап та:"халык ҙур ул, әҙип ул, шағир ул!.."

"Башкортостан кыҙы" өс йыл ғүмере эсендә ниндәйҙер эш

эшләй алған икән, иң элек үңен тыуңырған ошо халыкка, үңенең укыусыһына бурыслы.

Өс йыл ғүмер... Аң ңа, күп тә. Байтак эш эшләнгән, ә эшләйһеләре тағы ла күберәк, кыңыклырак һәм яуаплырак. Шуның өсөн артабан да кәңәшләшеп эшләйек, дуςтар. "Киң кейем туңмаς, кәңәшле ил аңмаς"- тигән бит халык мәкәле. Халык әйтһә, хакты әйтә. Тормош кушканса, заман талабынса, әңләнәйек, табайык, ижад итәйек!

Рәми Ғарипов,

журналдың яуаплы секретаре.